*Айһылыу ХӘСӘНОВА*



# Бәпкә көткән инәй

(поэма)

Һәр яҙ һайын өй алдында
Бәпкә көтә күрше ҡарсыҡ.
Ҡулдарында, уйынсыҡтай,
Зыр әйләнеп бейей орсоҡ.

Ҡөйҙәр көйләй, уйҙар уйлай
Орсоғоноң ыңғайына;
Тирә-йүнде байҡап ала,
Ҡулын ҡуйып маңлайына.

Күптән үлгән ире менән
Һөйләшә ул көндәр буйы.
Икәү уҙған ғүмер юлын
Мең ҡат урап үтә уйы.

“Беҙ бәхетле инек, йәнем,
Тормош ауыр — һуғыш, тимәй”, —
Күҙҙәренә тулған йәште
Яулыҡ менән һөртә инәй.

“Был донъяла ике тапҡыр
Яңғыҙ ташлап киттең мине.
Беренсеһе һуғыш булһа,
Икенсеһе — үлем ине.

Дошман яуы ҡупҡас илдә,
Иң-иң матур йәйге айҙа,
Һин, бөркөтөм, тәүге сафта
Фронтҡа киттең, хушлашмай ҙа.

Бик көттөрөп, һағындырып,
Шатлыҡ булып килде хатың.
Һинән — миңә, минән һиңә
Ташый хаттар һөйөү антын.

Өскөл хаттар һарғайғандар,
Йәнгә яҡын таныш яҙыу.
Иркә һүҙҙәр, йыуатыуҙар,
Байрам менән ҡотлап яҙыу.

Һағыш, һөйөү, наҙға тулы
Беҙҙең йәшлек иҫтәлеге.
Яу юлыңды күҙаллата
Һәр беренең эстәлеге.

Ә быныһын яҙғанһыңдыр
Разведкаға китер саҡта.
“Иҫәнлегем телә!” — тигән
Үтенес бар ошо хатта...”

* * *

...Өс көн буйы йөрөнөләр һалдаттар,
Арыныулар — ошонда ял алмаҡтар.
Тел артынан йөрөүҙәре гел бушҡа,
Был разведка килтермәне уңышҡа.
Ял урыны — тыныс урман аҡланы,
Һалдаттарын сержант үҙе һаҡланы.

*Айһылыу ХӘСӘНОВА 1953 йылда Башҡортостандың Әбйәлил районы Үтәгән ауылында тыуған. Хәҙерге көндә үҙ районының Рыҫҡужа ауылында йәшәй. “Урал арғаяғы ижади көстәренең “Ҡуңыр буға” берләшмәһе” төбәк йәмғиәт ойошмаһы ағзаһы. Үҙнәшер ысулы менән баҫылған “Яҙмыштар” китабы авторы (Аҫҡар, 2007 йыл). Уның поэмаларҙан һәм шиғырҙарҙан торған йыйынтығы айырым китап итеп баҫтырып сығарыу өсөн Башҡортостан “Китап” нәшриәтенә тәҡдим ителгән.*



Тәрән уйҙар биләп алды егетте,
Яйлап ҡына таң һыҙылыр мәл етте.
Ишеткәндәй булып шомло тауышты,
Егет бик һаҡ алға табан шыуышты.
Ҡалҡып тороп, тирә-яҡты байҡаны,
Һалҡын тулҡын буйлап үтте арҡаны.
Лыбыр-лыбыр һөйләшәләр ҡайҙалыр,
Был немецтар түгелме һуң, ҡаҙалғыр?!
Йә Хоҙайым! Сержант тыныс тигән ер
Землянка бит! Ә эс яҡта кемдәрҙер
Һөйләшәләр, көлөшәләр һаман да,
Әйтерһең дә, улар аулаҡ урында.
Иптәштәрен егет йәһәт уятты,
Биләнеләр һул яҡты һәм уң яҡты,
Һәм ишекте ҡапыл тибеп астылар,
Шәм шикелле теҙелешеп баҫтылар.
Ә немецтар өнһөҙ ҡалды ҡурҡыштан,
Өҫтәрендә йоҡа күлдәк, аҡ ыштан...

* * *

“Алтын-көмөштән ҡәҙерле
Хаттар менән тулы һандыҡ.
Һин — һуғышта, ә мин эштә,
Хаттарҙы беҙ көтөп алдыҡ...”

* * *

Хаттар яҙа батыр егет өйөнә,
Әсәкәйе уҡый-уҡый һөйөнә:
“Ағайымдан бармы, әсәй, хат-хәбәр,
Хаты килһә, ҡайҙалығын яҙ, зинһар...”
Әсә яҙа, алып ҡулға ҡәләмен:
“Һиңә, балам, минең ҡайнар сәләмем.
Имен йөрөп, һау ҡайтһын, тип, улҡайым,
Доғаларҙың иң изгеһен уҡыйым.
Һыуға төшкәндәй юғалды ағайың,
Ышанмайым, ул иҫәндер, моғайын...”

* * *

Хаттар яҙа егет матур ҡыҙға ла:
“Һине уйлап, минең йәнем һыҙлана.
Һуғыш тимәй, гөлдәр япраҡ яралар,
Алыҫая бара беҙҙең аралар.
Йәҙрә-үлем оса дошман яғынан,
Ә мин һине шундай өҙөлөп һағынам.
Хаттар йөрөр араларҙа әлегә,
Улар сәләм ташыр һеҙҙән әрмегә...”

* * *

Ә һөйгәне күптән хеҙмәт урынында,
Ағас ҡырҡып, норма үтәй урманда.



Бына бөгөн ҡустыһына хат яҙа:
“Бер ҙә бушап булманы, — ти, — был айҙа.
Сәләм һиңә, апайыма, һеңлемә,
Өй хәлдәрен күберәк яҙ һин миңә.
Мең михнәттәр менән еттек Инйәргә,
Ауырлыҡтар төштө беҙҙең иңдәргә.
Ун биш йәшлек үсмер ҡыҙға эш ауыр,
Асығыуҙан өҙөлөп килә эс-бауыр.
Сплавҡа ағас ташый ылауҙар,
Йөк тейәргә көс етмәйсә илауҙар!..
Фәрихалар, Мәфтухалар ауылда
Яталармы, теймәй ел дә, дауыл да?
Һуғыш бөтһә, байрам булыр беҙҙә лә,
Мин ҡайтырмын, ҡайтыр ағай, еҙнә лә.
Миңә төбәп хаттар килһә, һал бында —
Серҙе сисмә, берүк, апай алдында...”

* * *

“Өскөл хаттар араһында
Ҡустымдың да хаттары бар,
Һәм уларҙың тарих булып
Мәңге ҡалыр хаҡтары бар...”
Ә ҡустыһы яҙа ауыл хаҡында,
Өй йылыһы килгән кеүек хатында:
“Минең йәшем күпме тиһәң, ун берҙә,
Байтаҡ йәшәп ташлағанмын был ерҙә.
Көс ултыра яйлап ҡына беләккә,
Ныҡ тотонам көрәк менән һәнәккә.
Яуҙа йөрөй ағай менән еҙнәбеҙ,
Их, ҡасан һуң дошмандарҙы еңәбеҙ?!
Терәк булып апайыма, һеңлемә,
Ир затынан өй эсендә мин генә.

* * *

Әүрәп кенә йөрөр саҡта уйынға,
Ауырлыҡтар төштө беҙҙең быуынға.

* * *

Ҡара ҡағыҙ алды кисә күршеләр,
Һәләк була ниндәй һәйбәт кешеләр!
Өй беренсә килеп бөттө был ҡағыҙ,
Яуға киткән ир-ат өсөн ҡурҡабыҙ.
Ағайҙың да хаты килмәй бик күптән...
Ҡара ҡағыҙ килә күрмәһен бүтән!..”

* * *

Тап килтереп эш-көштән буш мәлдәрен,
Апай яҙа, белдереп үҙ хәлдәрен:
“Иҫән булғас, тағы килдек Инйәргә,
Был турала тағы ниҙәр һөйләргә?

Йыл да килгәс, ауыр түгел эше лә,
Эт ҡайышына әйләнә кеше лә.
Мастер маҡтап алды беҙҙе кисә кис:
“Белмәйбеҙ, тип тормайһығыҙ эште һис,
Норма тула көнөнөкө көндә, — ти. —
Барығыҙ ҙа егәрле һәм күндәм, — ти”.
Ударница булды хәҙер апайың,
Мин дә, ҡустым, алғы сафта атлайым...”

* * *

“...Нәрәт килгән, тигәс, йәнем өшөнө,
Эшкә килеп, күрҙек бына Өфөнө.
Нескә билде биштән быуып алабыҙ,
Эшсәндәрҙе ярата баш ҡалабыҙ.
Ҡыуыр өсөн илдән яуыз дошманды,
Үтәйбеҙ беҙ Тыуған илем ҡушҡанды.
Яуға китә, ҡорал тейәп, вагондар,
Һөйрәп кире ҡайтҡандары янғандар.
Тимер-томор бушатабыҙ ҡай саҡта,
Һөйләге лә килмәй хатта был хаҡта.
Янған танктар килтерҙеләр был юлы,
Ҡан уҡмашҡан каскалар ҙа туп-тулы.
Эй Хоҙайым, ниҙәр генә юҡ унда,
Хатта снаряд килгән бында вагонда.
Дүрт ҡыҙыҡай, бушатҡанда тимерҙе,
Шартлағандар... Шартлау йыһан емерҙе...”

* * *

“Һылыуҡайым, һинең генә
Бәхетеңә яҙғанға,
Фәрештәләр, һәләк итмәй,
Ҡилгән миңә ярҙамға,
Һинең ҡайнар мөхәббәтең
Ҡотҡарҙы һалдатыңды...” — тип,
Яраланғас, госпиталдән
Ебәргәнһең был хатыңды...

* * *

Аҙна буйы йөрөп дошман яғында,
Мәғлүмәттәр йыйып улар хаҡында,
Сыҡты егет үҙебеҙгә ҡайтырға,
Хызыр Ильяс юлдаш булһын батырға!
Дон йылғаһын йөҙөп сыҡҡан сағында
Ығы-зығы ҡупты дошман яғында.
Автоматтар, пулеметтар тырылдай,
Меңәр пуля яуа кеүек бер ыңғай.
Зәңгәр күкте айкап осҡан ҡоҙғондай,
Бик тә мөһим, маҡтаулы эш ҡырғандай,
Бер “Юнкерс” үтте үлем килтереп,
Йылға өҫтөн пулеметтан теттереп.

Ҡулбашына тейҙе пуля сираты,
Йылғаһыуын ҡып-ҡыҙыл ҡан бысратты.
Ярһыу ағым төпкә һөйрәп ағыҙҙы —
Яраланған һалдат һыуҙа яңғыҙы...
Һыңар ҡулы менән ишеп ҡараны,
Тик тулҡындар йыуҙы ҡанлы яраны.
Байтаҡ аҡҡас, тулҡын ярға һелтәне,
Берсә өшөй, берсә яна бар тәне...
Һаташамы егет, әллә ысынмы?
Шығырлата баҫып ваҡ-ваҡ ҡырсынды,
Ҡыҙҙың һыны күҙ алдында яҡтырҙы:
“Әйҙә, торсо! — тип саҡыра батырҙы, —
Һин үлергә тейеш түгел, ҡәҙерлем,
Ғүмер буйы мин көтөргә әҙермен...”
Аңһыҙ ятҡан егет ҡапыл ҡалҡынды,
Ҡанаттары һынған ҡоштай талпынды...

* * *

Бына тағы өй алдында
Бәпкә көтә күрше инәй.
Орсоғона аҡ йөн түгел,
Аҡ бәхеттәр сиртеп иләй.

Һәр яҙ һайын күк үләнгә
Бәпкәләрҙе алып сыға.
Үтеп-һүтеп йөрөүселәр
Иғтибар ҙа итмәй уға.

Сабыр ғына ултырһа ла,
Һағыштары — күкрәк тулы.
Зыр әйләнеп бейей орсоҡ,
Һис буш тормай ике ҡулы.

Йөҙө уйсан, моңһоу ҡараш,
Ул үткәне менән йәшәй.
Итәк тулы бала менән
Иренән дә ҡалған йәшләй.

“Әйтерһең дә, миңә һине
Ай бирҙе лә, ҡояш алды.
Үҙ ҡулдарың менән яҙған
Иҫтәлегең — хаттар ҡалды.

Ташлап киттең мине яңғыҙ,
Ҡинйә улың тыуған көндә.
Бәхет күгем ҡара янды,
Ҡояшымдың нуры һүнде.

Йөрәгеңә ҡаҙалғайны
Тәнеңдәге тимер ярсыҡ.
(Яулыҡ менән йөҙөн ҡаплап,
Сеңләп-сеңләп илай ҡарсыҡ).

Оҙаҡ көттөм кинйәбеҙҙең
Буй еткереп, өйләнгәнен,
Беҙҙән башҡа үҙ алдына
Донъя көтөп өйрәнгәнен.

Ә ул инде күптән атай,
Ейәндәрҙе теҙҙе алға.
Ваҡыт миңә юл тоторға
Мәңгелеккә, һинең янға.

Алып барам һиңә, йәнем,
Һағыш ҡатыш һөйөү наҙын.
Икәү бергә ҡаршыларбыҙ
Етмешенсе Еңеү яҙын!..”

...Иләп бөтә алмайынса
Ҡолғалағы ап-аҡ йөндө,
Бәхйылыҡҡа күсте инәй
Шатлыҡ тулы Еңеү көндө.

Ә быйыл яҙ ейәнсәре
Бәпкәләрҙе алып сыҡты.
Сабыр ғына ултырыуы
Хәтерләтте шул ҡарсыҡты.